Башҡортостан Республикаһы Өфө районы муниципаль районы

Шамонин ауылының “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы муниципаль

мәктәпкәсә мәғариф бюджет учреждениеһы

**«Уйнаһынғына ҡурайым!» темаһына**

**дәрес конспекты**

**(өлкән төркөм)**



Әҙерләне:
Юсупова А.И.

**Шамонин ауылы – 2021й.**

**Өлкәндәр төркөмөндә танып белеү өлкәһе буйынса белем**

**биреү эшмәкәрлеге**

**Уйнаһынғына ҡурайым!**

**Төпбелембиреүөлкәһе**: социаль- коммуникатив үҫеш.

**Бурыстар:**

**Белем биреүсе:** башҡорт халыҡ музыка ҡоралы ҡурай менән төптәнерәк танышыу

**Үҫтереүсе:** балаларҙың күҙаллауын,ихтибарлығын,фекерләү һәләтен, телмәрҙәрен үҫтереү

**Тәрбиәләүсе:** Тыуған илгә, Башҡортостандың ете мөғжизәһенә, башҡорт халыҡ көйҙәренә һөйөү, туларға ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләү.

**Интеграция:** телмәр үҫтереү, танып белеү, уйын эшмәкәрлеге

**Йыһазландырыу:** ҡурай көйҙәренә аудиояҙма, ҡурай, ҡурай сәскәһе, Башҡортостан Республикаһының дәүләт символдары ,"Ҡурай" әкиәте буйынса йәнһүрәт.

**Дәрес барышы:**

(Талғын ғына ҡурай моңо яңғырай.)

**Тәрбиәсе:**

Ниндәй моң был, ҡайҙан ишетелә
Ҡоштар тауышымы ?Кем белә?
Сихри моң ҡайҙан килә?
**Балалар:** Был бит ҡурай моңо…

**Тәрбиәсе:** Эйе, дөрөҫ, был сихри ҡурай моңо. Ҡурай моңон ишетһәң күңелдәрҙә аңлата алмаҫлыҡ сихри тойғо барлыҡҡа килә.

Балалар, ә һеҙҙең күңелегеҙҙә ниндәй тойғолар барлыҡҡа килде?

**Балалар:** ҡурай моңон ишетһәң күңел тыныслана

**Тәрбиәсе** : -Ҡурайҙың нисек барлыҡҡа килгәген беҙ һеҙҙең менән башҡорт халыҡ әкиәттәренән һәм легендаларынан ишетеп беләбеҙ. Хәҙер, әйҙәгеҙ, ошо әкиәтте йәнһүрәт ярҙамында иҫкә төшөрөп китәйек әле.

**“Ҡурай” йәнһүрәтен ҡарау.**

**Тәрбиәсе:** Йәнһүрәт ҡарап күҙҙәребеҙ талып китте . балалар. Әйҙәгеҙ, күҙҙәребеҙгә гимнстика эшләп алайыҡ әле.

Күп эшләне, күп күрҙе,
Арынылар күҙҙәрем.
Йомам күҙем, ял итһен,
Асам күзем, күп күрһен.
Тағын йомам һәм асам,
Бер йомам да, бер асам.
Күҙҙәр хәрәкәте менән
Бик ҙур түңәрәкһыҙам.

**Тәрбиәсе:** Балалар, һеҙгә йәнһүрәт оҡшанымы? Нимә тураһында ул?

**Балалар:** Ҡурайҙың барлыҡҡа килеүе тураһында, уның үләндән эшләнгәнен белдек.

**Тәрбиәсе:** Ҡурай үләне башҡорт халҡының символы. Уның ете тажы, берләшкән ете ырыуҙы, халыҡтар дуҫлығынсимволлаштыра.

Балалар, ҡайҙа күргәнегеҙ бар ҡурай үләнен?

**Балалар:** Башҡортостандың флагында ла, гербында ла ҡурайҙың ете тажы һүрәтләнгән.

**Тәрбиәсе:** Балалар, ә һеҙ беләһегеҙме, 2009 йылда Башҡортостанда” Башҡортостандың ете мөғжизәһе” тигән конкурс иғлан ителә. Улар исемлегенә халыҡ тарафынан иң күп тауыш йыйған 7 мөғжизә инә. Әйҙәгеҙ, слайдтан ҡарап китәйек әле.

**Слайд “Башҡортостандың 7 мөғжизәhе”**

**Тәрбиәсе:** Моңло ҡурай ҙа 7 мөғжизә исемлегенә индерелгән.

Элек - электән ҡурай моңо башҡорт батырҙарын яуҙа ла, һунарҙа ла, эштә лә оҙатып барыр булған.Ул башҡорт халҡының шатлығын да, ҡайғыһын да уртаҡлашҡан.

**2-се слай**ды күрһәтеү.

**Тәрбиәсе:** Балалар, ә ҡурай нисә тотамдан яһала әле? (Яуаптар .)

Беҙ һеҙҙең менән ҡурайҙың һигеҙ тотамдан яһалғанын беләбеҙ. Әйҙәгеҙ, һамаҡлап күрһәтәйек әле.

**Балалар һамаҡлауы.**

- Ҡурай…
- Әү!
- Ҡайҙа үҫтең?
- Урманда…
- Кем ҡырҡты?
- Ҡурайсы
- Ни эшләргә?
- Уйнарға!

**Тәрбиәсе:** Һай, афариндар! Беҙ һеҙҙең менән ҡурай тураһында уйындар ҙа беләбеҙ.

**“Ҡурай” уйыны .**

Ҡурай тауышын ишетеп,

Беҙ сығабыҙ болонға.

*(Ҡурайсы уртала тора, балалар йырлап йөрөйҙәр)*

Ҡурайсы менән бергәләп

Түңәрәктә уйнарға.

*(тыпырлайҙар)*

Һай, һай, һай, һай

Матур йәшел болонда.

(түңәрәкте ҡыҫалар, унан киңәйтәләр)

Ҡурайыңды безгә бир ҙә

Үҙең ҡарама бында.

**(**балалар сәпәкәйләй, ҡурайсы бейеп ике баланың араһына барып баҫа ла, ҡурайын һона.

Һай! тигән тауышҡа ике бала ике яҡҡа йүгерәләр, кем беренсе ҡурайҙы ала - шул

ҡурайсы ула, уйын ҡабатлана)

**Тәрбиәсе:**Афарин, балалар. Уйын оҡшанымы? Ә хәҙер беҙ төрлө

өлөштәрҙән ҡурайсәскәһен йыяйыҡ әле.

**Дидактик уйын "Ҡурай".**

**Тәрбиәсе:**Афарин, балалар. Ҡурай сәскәһен бик матур эшләнегеҙ.

**Йомғаҡлау.**

**Тәрбиәсе:** Балалар, беҙ бөгөнҡурай тураһында нимәләр белдек? Һеҙгә нимә оҡшаны?

(Балаларҙың яуабы).